

# Баш
# халҡының милли батыры Салауат Юлаев

# Батырҙың тыуған ере

**Салауат Юлаев**
**1754 йылда элекке Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙөй волосы (хәҙерге Салауат районы) Тәкәй ауылында тыуған**



# Салауат – «булғадир»

**1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Салауат Пугачевтың иң яҡын ярҙамсыһы, уның иң ҡыйыу полководецы – «булғадир»ы булған.**

**Салауат нисә йәшендә,**
**Йәшел ҡамсат бүрке башында**
**Булғадир булған, ай, Салауат**
**Егерме лә ике йәшендә.**

**(Халыҡ һүҙҙәре һәм**

# Салауат – милли батыр



А.С.Арыҫланов «Салауат менән Пугачев» 1983 йыл

# Салауат – милли батыр

1773 йылдың көҙөндә Яйыҡ (Урал) йылғаһы буйында Емельян Пугачев етәкселегендәге восстание башла- нып киткәс,рус колонизаторҙарына һәм башҡорт байҙарына ҡарата аяуһыҙ үс һаҡлап килгән башҡорт халҡын Салауат яуға күтәргән.

# Салауат – шағир-импровизатор

Салауат йәштән үк гүзәл тәбиғәтте, тыуған ерен нык яратҡан, халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһынған.Оҙаҡламай үҙе лә йырҙар, шиғырҙар сығара башлаған,ҡурайҙа ла оҫта уйнаған.

# Салауат – шағир-импровизатор

Салауат Юлаевтың 500-ҙән ашыу шиғыр юлдары билдәле.

Шиғырҙарында Тыуған илгә һөйөү, иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә өндәү, ҡатын-ҡыҙға ҡарата оло мөхәббәт тойғо-лары сағыла.

Салауат ҡалаһында батыр һәйкәле



# Салауат музейы



Малояҙҙа батырға музей асыу тарихы 1965 йылда башлана.Тәүҙә музей мәктәп бинаһында асыла. 1991 йылда Салауат музейы яңы бинаға күсерелә. Музейҙың авторы-архитектор А.В.Клемент.

# Музейҙағы экспонаттар



Салауаттың эйәре һәм ҡылысы



Салауат мәмерйәһе

Халыҡта һаҡланған риүәйәт буйынса,был мәмерйәлә Салауат Юлаев эҙәрләүсе батша карателдәренән йәшеренгән.Мәмерйә Йүрүҙән йылғаһындағы ҡаяла урынлашҡан.

# Батыр исемен йөрөткән пароход



# Үлемһеҙ батыр

Ул ваҡыттағы башҡа восстаниелар кеүек үк, Пугачев етәкселегендәге восстание ла еңелеү менән бөтә.1775 йылда Пугачев язалап үлтерелә; Салауат менән атаһы Юлайҙы, ҡаты язалағандан һуң, Балтик диңгеҙе буйына мәңгелеккә һөргөнгә ебәрәләр.25 йыл каторгала булғандан һуң, Салауат Юлаев 1800 йылдың 26 сентябрендә вафат була.

# Батыр эҙҙәре буйлап

Салауаттың
һуңғы
көндәре
үткән
Рогервик
ҡәлғәһе.



# Әҙәбиәттә Салауат образы



# Һүрәттәрҙә батыр образы



Ф.Исмәғилев, И.Ғаянов «Оран»

# Герой образы сәхнәлә

1955 йылда Заһир Исмәғилев ижад иткән «С. Юлаев» операһы сәхнәгә сыға. Салауат ролен артист Мәғәфүр Хисмәтуллин башҡара.



# «Салауат Юлаев » кинофильмы



Салауат ролен артист Арыҫлан Мөбәрәков башҡара.Режиссеры – Я.А. Протазанов

# Батыр исеме онотолмаç

1993 йылдың 12 октябрен-дә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербы ҡабул ителде. Гербтың нигеҙендә милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың республика символына әйләнгән һәйкәле сағылыш тапҡан. Гербтың проектын рәссам Фазлетдин Ислахов эшләне.



# Батыр исеме онотолмаҫ

1995 йылда Башҡортостан Республикаһы Законы менән Салауат Юлаев ордены билдәләнә.Был награда фән, мәҙәниәт,сәнғәт,әҙәбиәт өлкәһендәге уңыштар,шәхси батырлыҡтар өсөн бирелә. Тәүге наградаға 2000 йылда композитор Заһир Исмәғилев лайыҡ булды.



# Юлай улы Салауат

**Йылдар түгел, хатта быуаттар ҙа**
**Юялмаҫлыҡ эҙҙәр бар икән.**
**Баш ҡайтмаҫлыҡ хәтәр яҡтарҙан да**
**Урап ҡайтҡан ирҙәр бар икән…**
**Батырҙарҙың тыуған йылы була,**
**Вафат булған йылы билгеһеҙ,**
**Салауаттың да шанлы ғүмер юлы**
**Халыҡ ғүмере һымаҡ үлемһеҙ!**

**Рәми Ғарипов**

# Игтибарыгыз өсен рәхмәт !